**Рәхмәт Раббым, барлығың өсөн!**

Яңы көнгә Раббым күҙҙәремде астың,
Рәхмәт Һиңә был көнөң өсөн!
Үҙ юлымды нисек саф тоторға,
Бирһәң ине мул итеп, дәрт һәм көс!

Бары Һинең һүҙҙәреңде тыңлап,
Мин тырышам дөрөҫ йәшәргә.
Раббым Ғайса, маҡтау яуһын Һиңә,
Өйрәт мине ҡануның ҡағиҙәләренә.

Һаулыҡ та бир, инде Раббым миңә,
Күберәк  изге эштәр ҡылырға.
Һинең ауыҙҙан сыҡҡан һүҙҙәрҙе,
Бар донъяға иғлан итергә.

Рәхмәт Раббым Ғайса, барлығың өсөн!
Мине гонаһтарҙан ситләштерҙең.
Йәнемдә был көнгәсә һаҡлап тора,
Һинең, миңә булған мәрхәмәтең.

Яҡындарым, иптәш-дуҫтарым исеменә,
Ялбарыуҙарымды ишет Раббым.
Айырма Һин уларҙы мәрхәмәтеңдән,
Онотмаҫ өсөн ерҙә Һин барын!

Рәхмәтлемен Һиңә, Раббым Ғайса!
Зирәк аҡыл миңә биргәнеңә.
Үҙ ҡағиҙәләреңә мине өйрәтеп,
Иманлы, тура юлды күрһәтеүеңә.

Раббым, мин Һинең Изге һүҙҙәреңә,
Ҙур өмөт бағлап йәшәйем.
“Урал” тауы кеүек, берҙә ҡаҡшамай,
Ғүмерем буйы, ныҡ булырға теләйем.